МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

ЙӨРӘГЕҢӘ КҮҘ ҺАЛ...

Йәки атайҙарҙың вазифалары

Ҡөрьән аяттары, Пәйғәмбәребеҙҙең өлгөһө атайҙарҙың, ғаилә башлыҡтарының иңенә ни тиклем мөһим һәм етди бурыс һалынғанлығын күрһәтә.

Атайҙарҙың яуаплылығы - бөгөнгө замандың актуаль темаларының береһе булып тора, сөнки ғаиләлә яуапһыҙ булыу ирҙәрҙең абруйы юғалыуға, күп һанлы ғаилә фажиғәләренә килтерә. Ирҙәр эштән бушамай, йә күберәк аҡса эшләү теләге менән, йә мин-минлек арҡаһында ғаиләһе алдындағы мөһим бурысты үтәргә теләмәй, йә быға көстәре етмәй. Күп осраҡта ҡатындары менән балалары ғаилә бышлығын бөтөнләй күрмәй. Таң һарыһынан эшкә киткән һәм кис һуң ғына ҡайтып, арыған йә тормошҡа ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан, көнө-төнө телевизор ҡараған атайҙар балаларына тейешле тәрбиә бирә алмай. Шулай итеп, атайҙар балалары алдында өлгө булыуҙан туҡтап, үҙҙәренең абруйын юғалта. Был осраҡта балалар аталарынан үҙләштерә торған сифаттарҙан мәхрүм ҡала...

Бөгөнгө көндә атайҙар вазифаһы башҡалар иңенә һалынды; шулай ҙа бүтән кешеләр, ойошмалар, мәктәптәр, институттар атай бурысын тулыһынса үтәй алмай. Ҡөрьән аяты атайҙарҙың вазифаһы мөһим икәнлеген күрһәтә: "Был нурлы шәмдәл байтаҡ ҡына өйҙәрҙең эсен яҡтырта. Шундай өйҙәрҙең абруйы артһын, тип һәм шунда Үҙенең исемен зикер итһендәр өсөн (Аллаһ) рөхсәт бирҙе. Ул өйҙәрҙә иртә-кис Уға тәсбих әйтәләр. Бар шундай кешеләр, уларҙы сауҙа һәм алыш-биреш эштәре лә Аллаһҡа зикер итеүҙән, намаҙ уҡыуҙан, зәкәт биреүҙән айыра алмай" ("Ән-Нур", 36-37).

Аяттарҙа сауҙа эштәре Аллаһы Тәғәләне иҫкә төшөрөүгә, намаҙ уҡыуға, хәйер бирергә ҡамасау була алмай икәнлегенә төп баҫым яһала. Үкенескә күрә, бөгөнгө көндә эш мотлаҡ үтәләсәк ғибәҙәттәрҙе һәм намаҙҙарҙы тотҡарлай. Ошо сәбәпле, ирҙәрҙең ҡатындарына һәм балаларына ҡарата бурысы һәм яуаплылығы аҙаҡҡа ҡалдырыла, йә бөтөнләй үтәлмәй.

Мөхәммәт пәйғәмбәр ғәләйһиссәләм үҙенең бер хәҙисендә былай тигән: "Һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе булып тора һәм ул үҙенең көтөүе өсөн яуаплы. Дәүләт кешеһе башлыҡ булып тора һәм уға ышанған халыҡ өсөн яуаплылыҡ йөрөтә; ир кеше ғаиләһенең идара итеүсеһе һәм уға яуаплы; ҡатын-ҡыҙ өй йылыһын һаҡлаусы һәм үҙенең вазифалары өсөн яуаплылыҡ йөрөтә; ҡол хужаһының мөлкәтен һаҡлай һәм шуға яуаплы булып тора. Шулай итеп, һеҙҙең һәр берегеҙ көтөүсе булып тора һәм ул үҙенең көтөүе өсөн яуаплы".

Ир кешенең яуаплылығына ғаиләне матди яҡтан тәьмин итеү инә. Шулай ҙа кешенең ихтыяжы бының менән генә бөтмәй әле. Балалар үҙҙәренең ата-әсәһен, йортон яратырға, матур мөхиттә үҫергә тейеш. Өй усағын һаҡлаусы ҡатын-ҡыҙ өсөн иң ҙур бәхет - был донъяла ғына түгел, Ҡиәмәт көнөндә лә уның өсөн яуап биргән, балалар тәрбиәләшергә ярҙам итеүсе, терәк булыусы тормош юлдашының янында булыуы. Балаларға атай абруйы кәрәк, нәҡ атайҙарға хөрмәт уның үҙ-үҙенә ышаныслығына, үҙенә дөрөҫ баһа ҡуйыуына нигеҙ булып тора.

...Дөрөҫ һәм ныҡ, ихлас инаныу кешенең тормошон тыштан ғына йәмләп ҡалмай, йәнен дә тынысландыра, тәртипкә килтерә, әйләнә-тирәләгеләр менән мөнәсәбәттәрҙе яйларға ярҙам итә. Ундай кешегә ғаилә тормошо буш булып тойолмай, ә тәрән мәғәнәгә эйә була. Бәхеткә илтеүсе дөрөҫ юл ҡайҙа икәнлеге тураһында фекерләүсе аҡыллы кеше үҙенең бәхете өсөн генә түгел, ә үҙенең ҡарамағындағы кешеләр бәхете өсөн дә тырышасаҡ.

Васыят әйтеү - сауап

Кешенең, донъя ҡуйырҙан алда, ғүмер буйы йыйған малын ни эшләтергә, ҡайҙа ҡулланырға кәрәклеген әйтеп ҡалдырыу - васыят була. Мөхәммәт ғәләйһиссәләм был турала: "Васыят әйтеп үлгән кеше тәҡүә (дингә ныҡ бирелгән, уның йолаларын теүәл үтәгән кеше) булып, Аллаһы Тәғәлә алдында шәһит булып донъя ҡуйыр", - тигән.

Ошо хәҙискә ҡарағанда, һинән һуң ҡаласаҡ милекте, байлыкты изге эштәргә васыят итеү мосолман кешеһе өсөн - сауап. Унан тыш, Ислам динебеҙ буйынса, милекте файҙалы урындарға васыят итеп ҡалдырыу - ҡиәмәт көнөнә тиклем бөтмәҫ изге ғәмәлдәрҙең береһе.

Васыятты иҫән саҡта телдән әйтеп йә ҡаты ауырыған мәлдә ышаныслы кешеләрең ярҙамы менән яҙып ҡалдырырға ла мөмкин. Әммә малың була тороп, васыят әйтмәйенсә үлеп китһәң, гонаһлы булаһың. Төрҙәренә килгәндә, важиб (үтәлергә тейешле эш, бурыс), мөстәхәб, мәкруһ (насар, яман), мөбах (гонаһҡа һаналмаған, тыйылмаған эш), хәрәм булған васыят бар.

Важиб булған васыят

Берәй кеше башҡаларға булған бирәсәген, бурысын, үҙе үлгәндән һуң ҡалған малы, милеге менән түләргә ҡушып, васыят әйтеүе важиб була. Үлем хәлендә яткан мосолман, әлбиттә, кемгә күпме бирәсәге барлығын да әйтергә тейеш. Яҡты донъянан киткәндән һуң, ерләү сығымынан артып ҡалған милекте, аҡсаны, малды мәрхүмдең вариҫтары иң тәү сиратта уның булған бурыстарын ҡаплауға тотонорға тейеш. Әгәр байлығы бирәсәктәрен тулыһынса түләп бөтөүгә етмәһә, һәр кемдең бурысына ҡарап, булғанын тигеҙ өлөштәргә ғәҙел бүлеп, бурыс эйәләренә үлгән кешенең малы етмәгәнлеген аңлатып, ҡалған өлөшөн бәхилләүҙәрен үтенергә кәрәк. Сөнки үлгән кешене донъя малы, байлығы өсөн генә Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында бурыслы итеп ебәреү сауаплы эш түгел.

Кеше бирәсәктәрен түләргә васыят ҡылып донъя ҡуйып та вариҫтары уның васыятын үтәмәһә, ул ваҡытта мәрхүм түгел, ә вариҫтары гонаһ аласаҡ. Әгәр васыят әйтмәйенсә үлһә, шулай ҙа вариҫтары бурыстарын ҡайтарһа - бер кем дә, ә ҡайтармаһа - мәрхүм дә, вариҫтары ла гонаһлы була.

Үлем сигендә ятҡан кеше, байлығы бирәсәктәрен ҡайтарғандан һуң да артып ҡалһа, Аллаһы Тәғәлә алдындағы бурыстарын онотмаҫҡа тейеш. Мәҫәлән, ул ҡасандыр ҡылынмай ҡалған намаҙҙары һәм доғалары өсөн Аллаһы Тәғәлә хаҡына малының өстән бер өлөшөн саҙаҡа (хәйер) итеп бирергә ҡушып васыят әйтә ала. Ҡалған өлөшө вариҫтарына бирелә. Аллаһы Тәғәлә хаҡын үтәр өсөн әйтелгән васыят фидиә (үлгән кешене, малынан муллаға бирелә торған хәйер) тип атала.

Үлгән әҙәмдең малының өстән бере васыятты үтәргә етмәһә, вариҫтары (әгәр теләһә) үҙҙәренә тейешле мал өлөшөнән бүлеп бирә ала. Бирмәһәләр ҙә, гонаһлы булмайҙар. Үлгән кеше васыят әйтеп ҡалдырып та, туғандары бер нәмә лә бирмәгән осраҡта ғына гонаһлы һаналалар.

Мөстәхәб булған васыят

Мәрхүмдең вариҫтары былай ҙа бай булып, малының өстән бер өлөшө важиб булған васыятты үтәргә етһә, башҡа кешеләр һәм Аллаһы Тәғәлә алдында үтәлергә тейеш бурыстары булмаһа ла, малын, байлығын мосолмандар өсөн файҙалы эштәргә васыят итеп ҡалдырырға тейеш. Мәҫәлән, мәсет, мәктәп төҙөргә, ошо төр эштәргә булышлыҡ итеүсе хәйриә ойошмаларына фәҡир балаларҙы уҡытыу, мохтаждарға ярҙам күрһәтеүсе балалар йорттарына һәм башҡа файҙалы урындарға аҡса күсереү - сауаплы эштәрҙән һанала.

Ул ҡиәмәт көнөндә гонаһтарҙың ярлыҡаныуына сәбәп була торған саҙаҡа ла. Әгәр кеше малы артып та шундай изге эштәрҙе үтәмәһә, ҡиәмәт көнөндә бәхетле булмаясаҡ.

Мөбах булған васыят

Мөбах мөстәхәб булған васыятҡа оҡшаш. Айырмаһы - вариҫтарҙың ярлы булыуында. Йәғни был осраҡта мәрхүмдең бурыстары һәм бирәсәктәре хужаларына ҡайтарылғандан һуң ҡалған байлығы тик вариҫтары ҡулына күсә.

Мәкруһ булған васыят

Кешеләр файҙалана алмаҫтай урындарға васыят итеп ҡалдырылғаны - мәкруһ булған васыят. Миҫал өсөн, малын боҙоҡ күңелле, йәғни Аллаһы Тәғәлә һәм Мөхәммәт пәйғәмбәребеҙ тарафынан тыйылған урындарға тотонорҙайҙарға васыят итеү, фасиҡ (әхлаҡи яҡтан аҙғын, боҙоҡ) булған кешеләргә саҙаҡа бирергә ҡушып ҡалдырыу һәм башҡалар.

Хәрәм булған васыят

Вариҫтарҙың ҡайһыларын тейешле малдан мәхрүм итеп, бөтөн малыңды берәүһенә генә ҡалдырыу йә яратҡан кешеңә өлөш сығарһындар өсөн, уға күпмелер бурысым бар ине тип алдап, васыят әйтеү - хәрәм.

Үлгән ваҡытта уның балалары йәш булып, үҙҙәрен аҫрай алмаһа, васыят ҡалдырыусы теге донъяға китерҙән алда уҡ балаларын тәрбиәләрлек тоғро, ғәҙел кеше, йәғни васи (опекун) һайларға тейеш. Ул билдәләп ҡалдырған васи яман күңелле булып сыҡһа, сабыйҙарҙың малын юҡ-барға туҙҙырһа, уны ҡазый (шәриғәт буйынса хөкөм итеүсе рухани кеше) икенсе берәүгә алмаштырып ҡуя ала.

Васи балаларҙы ҡарауҙы үҙ өҫтөнә алһа, мәрхүмдән ҡалған милеккә ҡул һуҙмаҫҡа, малдарын туҙҙырмаҫҡа, кәсептәрен дауам иттерергә, малдары артып китһә, һатып аҡсаға әйләндерергә бурыслы. Балаларға кәрәк нәмәне генә алырға тейеш.

Әгәр сабыйҙар файҙаһы өсөн үҙ сығымынан кейем-һалым, ризыҡ алып бирә икән, ул ваҡытта күпме биргән, шул тиклемен үҙенә кире ҡайтара ала. Балалар бәлиғ булғас, васи ҡазыйҙар алдында бөтәһен дә хисаплап, ата-әсәләренән ҡалған малды тулы хужалары ҡулына тапшыра.

Абдулла НУРСӘЙЕТОВ
әҙерләне.

Өфөлә намаҙ ваҡыты

Шәүүәл — 29 көн 2009 миләди йыл
1430 һижри йыл.

Шәүүәл	Аҙна көндәре	Сентябрь Октябрь	Иртәнге намаҙ	Ҡояш калка	Өйлә нам.	Икен. нам.	Аҡшам. намаҙы	Йәстү намаҙы
1	Йәкшәмбе	20	06.28	07.58	14.30	18.50	20.20	21.50
2	Дүшәмбе	21	06.30	08.00	14.30	18.48	20.18	21.48
3	Шишәмбе	22	06.32	08.02	14.30	18.46	20.16	21.46
4	Шаршамбы	23	06.33	08.03	14.30	18.43	20.13	21.43
5	Кесе йома	24	06.35	08.05	14.30	18.40	20.10	21.40
6	Йома	25	06.37	08.07	14.30	18.38	20.08	21.38
7	Шәмбе	26	06.39	08.09	14.30	18.35	20.05	21.35
8	Йәкшәмбе	27	06.41	08.11	14.30	18.33	20.03	21.33
9	Дүшәмбе	28	06.43	08.13	14.30	18.30	20.00	21.31
10	Шишәмбе	29	06.45	08.15	14.30	18.28	19.58	21.28
11	Шаршамбы	30	06.47	08.17	14.30	18.25	19.55	21.25
12	Кесе йома	1	06.48	08.18	14.30	18.23	19.53	21.23
13	Йома	2	06.50	08.20	14.30	18.20	19.50	21.20
14	Шәмбе	3	06.52	08.22	14.30	18.17	19.47	21.17
15	Йәкшәмбе	4	06.54	08.24	14.30	18.15	19.45	21.15
16	Дүшәмбе	5	06.56	08.26	14.30	18.12	19.42	21.12
17	Шишәмбе	6	06.58	08.28	14.30	18.10	19.40	21.10
18	Шаршамбы	7	07.00	08.30	14.30	18.08	19.38	21.08
19	Кесе йома	8	07.02	08.32	14.30	18.05	19.35	21.05
20	Йома	9	07.04	08.34	14.30	18.03	19.33	21.03
21	Шәмбе	10	07.06	08.36	14.30	18.01	19.31	21.01
22	Йәкшәмбе	11	07.07	08.37	14.30	17.58	19.28	20.58
23	Дүшәмбе	12	07.09	08.39	14.30	17.551	19.25	20.55
24	Шишәмбе	13	07.11	08.41	14.30	7.53	19.23	20.53
25	Шаршамбы	14	07.13	08.43	14.30	17.51	19.21	20.51
26	Кесе йома	15	07.15	08.45	14.30	17.48	19.18	20.48
27	Йома	16	07.17	08.47	14.30	17.46	19.16	20.46
28	Шәмбе	17	07.19	08.49	14.30	17.43	19.13	20.43
29	Йәкшәмбе	18	07.21	08.51	14.30	17.41	19.11	20.41

МОСОЛМАН ТОРМОШОНДА ТИҪБЕ

Тиҫбе "тәсбих" һүҙенән алынған. Тәсбих - Аллаһы Тәғәләне маҡтау-ололауҙар, етешһеҙлектәрҙән пакланыу, доға, Аллаһты зекер итеү.

Тиҫбе - зекерҙәрҙе һәм нәфел намаҙҙарын һанап барыу өсөн епкә теҙелгән ынйымәрйен бөртөктәре, сәйлән.

Заманында Мөхәммәд, ғәләйһис-сәләм, үҙе тәсбихты бармаҡтары менән һанап барған, ошолай һанап барырға сәхәбәләрен дә өйрәткән. Ҡатын-ҡыҙҙарға кәңәш биреп тә ул: "Тәсбих, тәһлил әйтеп тороғоҙ. Әйткәндәрегеҙҙе бармаҡ менән һанап барығыҙ. Ҡиәмәт көнөндә уларҙан был турала ла һорау буласаҡ һәм яуап та алынасаҡ", - тигән.

"Бер ваҡыт пәйғәмбәребеҙ эргәмә килеп инде һәм алдымда өйөләп ятҡан хөрмә емеше төштәрен күреп ҡалды", - тип хәтерләр булған Сафия. Хөрмә емеше төшләре күп була. 4 меңгә етә. "Был нимә?" - тип һорай пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. "Былар ярҙамында мин әйткән тәсбихтарымды һанап барам", - ти Сафия. "Ә мин тәсбихтарҙы башҡа төрлө итеп күберәк тә әйтәм", - ти пәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. "Мине лә өйрәт!" - ти Сафия. "Сөбхәнәллаһ! Аллаһтың яралтылмыштары күпме булһа, Ул үҙе лә шул тиклем үк пак!" - тип әйт", - тигән пәйғәмбәр.

Сәхәбәләрҙән Әбү Әд-Дарда үҙе менән таштар йөрөтә. Муҡсаһындағы таштар бөткәнсе тәсбих әйтә торған була, - тигән риүәйәттәр ҙә бар.

Әбү Һөрәйрәнең ятҡан килеш тәсбих әйтеп, таштарҙы йәки хөрмә емеше төштәрен ырғытып тороуы билдәле. Таш тар йәки төштәр ташланып бөткәс, хеҙмәтсе уларҙы тағы ла йыйып ала торған була.

...Әбү Һөрәйрәнең мең төйөн төйнәлгән ебе булыуы хаҡында ла риүәйәттәр бар: төйөндәр бөткәнсе тәсбих әйтмәй тороп ул йоҡларға ла ятмаған.

Башҡа сәхәбәләр ҙә тәсбихты шул рәүеш һанап барғандар.

Сәхәбәләрҙең күбеһе иҫән ваҡытта уҡ әле Хәсән Әл-Басри тиҫбе менән файҙалана башлай.

"Хәсән Әл-Басриҙы тиҫбе тотҡан хәлдә күреп мин: "Әй, остазым! Шундай ҙа юғары дәрәжәләргә күтәрелгән килеш нишләп һеҙ әлегә тиклем тиҫбе менән файҙаланаһығыҙ?" - тип һораным, - тигән шәкерттәрҙән берәү". "Мин, - тигән остаз, - дингә юл башлағанда тиҫбенән файҙаландым, юлымды тамамлап килгәндә лә унан айырылырға теләмәйем. Күңелем менән дә, телем менән дә, ҡулдарым менән дә Аллаһты зекер итеп тороу миңә бик тә оҡшай".

"Зекер итеүҙәре тиҫбеләр менән һанап барғанда яңылышыуҙарға урын ҡалмай, - тигәндәр ғалимдар. - Тиҫбе, тигән дә улар, был фани донъяла ла, әхирәттә лә игелек өсөн файҙаланыла". Шуның өсөн дә ул мосолман тормошонда бик ҡәҙерле.

ТӨШТӘРЕНДЕ ИЗГЕЛЕККӘ ЮРА

Бер ҡатын ибн Сирингә килеп әйтте:

- Итәгемдә ике ынйы булыуын күрҙем: береһе икенсеһенән ҙурыраҡ ине. Уларҙың береһен һеңлем һорап алды, бәләкәйерәген бирҙем.

- Әй, ханым! - тине ибн Сирин, - Ҡөрьәндә һин береһе икенсеһенән оҙонораҡ булған ике сүрә өйрәнгәнһең, шуларҙың ҡыҫҡарағын һеңлеңә лә өйрәткәнһең.

- Дөрөҫ, - ти ҡатын. _ мин "Әл-Баҡара" ("Һыйыр") менән "Әлү Ғимран" (Ғимран ғаиләһе) сүрәләрен өйрәндем дә сүрәләрҙең ҡыҫҡарағы "Әбү Ғимран"ды һеңлемә лә өйрәттем.

* * *

Берәүҙең төшөнә мәрйендән эшләнгән муйынсаҡ йәки төймә инһә, ул Аллаһ тыйған нәмәләр булыр. Аллаһ әйтә бит: "Бойорғандарымды үтәгеҙ! - ти, - хәрәм айҙың хөкөмдәрен боҙмағыҙ, ҡорбанға тәғәйенләнгән малдарға - уларҙың тамға һалынмағандарына ла, хаж хөрмәтенә тип биҙәкләп ҡуйылғандарына ла ҡағылмағыҙ; хәрәм йортҡа юл тотҡан кешеләрҙең йолаларын боҙмағыҙ. Улар унда Аллаһтың мәрхәмәт-шәфҡәтен һәм ризалығын өмөт итеп бара".

"Әл-Маидә" (Аш табыны) сүрәһе, 2-се аят.